МИНИСТЕРСТВО ПРОСВЕЩЕНИЯ РОССИЙСКОЙ ФЕДЕРАЦИИ

Министерства образования и науки Республики Башкортостан

Администрация городского округа город
Нефтекамск Республики Башкортостан

Муниципальное общеобразовательное автономное учреждение
средняя общеобразовательная школа №11
городского округа город Нефтекамск Республики Башкортостан

| | | |
|---|---|---|
| РАССМОТРЕНО<br>на заседании ШМО<br>руководитель ШМО<br>учителей родных языков и литературы и ОДНК НР<br>____________________<br>/И.Ф. Валиева/<br>Протокол №1 от 30.08. 2024г. | СОГЛАСОВАНО<br>Заместитель директора по учебной работе<br>МОАУ СОШ №11<br>____________________<br>/Р.Р.Ямалтдинова /<br>Протокол МС №1 от 30.08.2024г. | УТВЕРЖДАЮ<br>Директора МОАУ СОШ №11<br>____________________<br>/И.Г. Аллаяров/<br>Приказ №576 от 30.08.2024г. |

ДОКУМЕНТ ПОДПИСАН
ЭЛЕКТРОННОЙ ПОДПИСЬЮ

Сертификат: 00E04301A6D9BD4262D6EC61772058B4B2
Владелец: Аллаяров Илдар Габидович
Действителен: с 19.06.2024 до 12.09.2025

# КОНТРОЛЬНО-ОЦЕНОЧНЫЕ СРЕДСТВА

## по учебному предмету

## «Родной язык (башкирский)»

для обучающихся 6 класса

**г.Нефтекамск, 2024**

Аңлатма яҙыу

Диктант яҙыу текстары дәрестә үтелгән грамматик һәм лексик темалар менән бәйле алына.

Диктант эшенең йөкмәткеһе һәм структураһы түбәндәге документтарға таянып төҙөлдө:

. "Рәсәй Федерацияһында Мәғариф тураһында" Федераль законы №273-ФЗ, 29.12.2012й.
2. Нефтекама ҡалаһы 11-се мәктәптең муниципаль дөйөм автономия белем биреү учреждениеһының уҡыу планы.
3. “Рәсәй Федерацияһы халыҡтары телдәре тураһында” законы (№1807, 25.10.1991й.).
4.“Башҡортостан республикаһы халыҡтары телдәре тураһында ” БР Законы (216 –З, 15.02.1999 й.)
5. Төп дөйөм белем биреүҙең төп белем биреү программаһы.
6. Дөйөм белем биреү ойошмаларында уҡытыу рус телендә алып барылған 5-9 кластар өсөн (башҡорт теле һәм әҙәбиәте) уҡыу предметы буйынса дөйөм белем биреү өлгө программаһы.
7. Рәсәй Федерацияһы халыҡтарының туған телдәрен уҡытыу концепцияһы.
8. Башҡортостан Республикаһы Мәғариф һәм фән министрлығы коллегияһы ҡарары 29.08. 2024 йыл.

**Туған теле(башҡорт) буйынса белемдәрен һәм күнекмәләрен баһалау нормалары**

Контроль эшенең структураһы һәм үтәлеү вакыты

Тест 1 өлөштән тора.

Контроль эште башҡарыу өсөн 40 минут бирелә.

**Башҡорт теле буйынса белемдәрен һәм күнекмәләрен баһалау нормалары**

Диктанттарҙы баһалау

Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәр өсөн әҙерләнгән диктанттар тексына бөтә үҙ аллы һәм ярҙамсы һүҙҙәр инә. Грамматик эштәр өҫтәп бирелгәндә, диктант текстары бер аҙ ҡыҫҡартыла. Орфограммаларҙың һәм пунктограммаларҙың дөйөм һаны түбәндәгеләрҙән артмаҫҡа тейеш: II -4/1 , III- 5/2 , IV-6/2 , V -8/3 VI-10/3 , VII -12/6, VIII-14/6, IX-16/6

***Диктантты баһалағанда төҙәтелә, әммә иҫәпкә алынмай торған хаталар:***

1) мәктәп программаһына индерелмәгән ҡағиҙәләргә яҙылыштар;

2) әле үтелмәгән ҡағиҙәләргә яһалған хаталар;

3) автор ҡуйған ҡатмарлы пунктуация;

4) механик рәүештә бер хәреф урынына икенсеһен яҙыу.

***Тупаҫ булмаған хаталар:***

1) ҡағиҙәләрҙең иҫкәрмәләренә ҡараған хаталар;

2) бәйләү юлы менән яһалған ҡушма яңғыҙлыҡ атамаларҙа ҙур хәрефтең яҙылышына хаталар;

3) бер тыныш билдәһе урынына икенсеһен ҡуйыу;

4) үҙләштерелгән һүҙҙәрҙең ялғауҙары яҙылышына хаталар.

***Диктант бер генә билдә менән баһалана***.

**«5»**-хатаһыҙ йәки тупаҫ булмаған 1 орфографик, 2 пунктуацион хата булған эшкә: **1/0,1/2,0/2.**

**«4»** -2 орфографик, 2 пунктуацион, 1 орфографик, 3 пунктуацион: **2/2, 1/3, 2/3,3/3, 1/5, 0/7.**

«**3**» - 4 орфографик, 4пунктуацион, 3 орфографик, 5 пунктуацион: **4/4, 3/5, 3/6,**

өс бер типтағы хата ебәрелһә, **6/6** хаталы эшкә лә өс ҡуйыла.

«**2**» - 9 орфографик, 9 пунктуацион: **8/10, 9/9**

«**1**» - уҡытыусы ҡарамағында.

***Өҫтәлмә эштәрҙе баһалау:***

**«5» -** бөтә эш теүәл йәки бер хата булғанда.

**«4» -** эштең яртыһынан күберәге дөрөҫ эшләнһә.

**«3» -** яртыһынан әҙерегә дөрөҫ эшләнһә.

**«2» -** бер эш тә дөрөҫ эшләнмәгән

**Һаулыҡ мөмкинлектәре сикләнгән балалар өсөн**

**«5»** билдәһе төҙәтеүҙәр, бысратыуҙар булмаған, йә 2 пунктуацион хата булған эшкә, **«4»** билдәһе 3орфографик, 4 пунктуацион йә 2 орфографик, 5пунктуацион, йә орфографик хатаһыҙ, 6 пунктуацион хатаһы булған эшкә ҡуйыла. Әгәр хаталар араһында бер типтағылар булһа, 4 орфографик хаталы эшкә лә «4» билдәһе ҡуйырға мөмкин.

**«3»**билдәһе 4 орфографик, 5 пунктуационйә 8 пунктуационхаталыэшкәҡуйыла. Әгәрэштәөсбертиптағы хата ебәрелһә, 2 орфографик, 4 пунктуационхаталы эшкә лә «3» билдәһе ҡуйырға мөмкин.

**«2»** билдәһе 6 орфографик, 8 пунктуацион йә 10 пунктуацион хатаһы булған эшкә ҡуйыла. Хаталар һаны 8 орфографик хатанан да артып китһә, «1» билдәһе ҡуйыу уҡытыусы ҡарамағында.

Әгәр тексты күсереп яҙыуҙан һуң өҫтәмә грамматик, орфографик, лексик эштәр тәкдим

итеlhә, уларҙың hәр береhе айырым баhалана.
Грамматик биремдәрҙе баhалағанда түбәндәгеләрҙе иҫәпкә алыу тәҡдим итеlә:
**«5»** билдәhе бөтә эште лә теүәл йә бер хата булғанда,
**«4»** билдәhе эштең яртыhынан күберәге дөрөҫ эшләнгәндә,
**«3»** билдәhе яртыhынан әҙерәге дөрөҫ әшләнгәндә,
**«2»** билдәhе бер эш тә дөрөҫ эшләнмәгәндә ҡуйыла.

**Инеш контроль диктанты**

**Башҡорт аты**

Ер йөҙөндә ике йөҙ иллегә яҡын тоҡом ат бар. Шулар араһында башҡорт аты көслө һәм талымһыҙ булыуы менән бүтән тоҡомдарҙан ныҡ айырыла. Башҡорт тоҡомо далалы ерҙә лә, таулы-урманлы яҡтарҙа ла йәшәй. Сасҡау һыуыҡҡа ла, йәйге селләгә лә бирешмәй. Тауҙарға еңел артыла. Тибендә үҙенә аҙыҡ таба. Һыуҙың таҙаһын ғына эсә. Бесән менән һоло ғына ашай.

Эш.

Юлдан-юлға күсереп булмай торған ике ижекле һүҙҙәрҙе айырып яҙ.

Ике өндө белдергән хәрефтәрҙең аҫтына һыҙ.

Һуңғы һөйләмдә ярҙамсы һүҙҙең аҫтына һыҙ.

## Йыллыҡ контроль диктанты

### Яҙ һулышы

Үҙенең күңелле шау-шыуына, сылтырап аҡҡан гөрләүектәренә, шартлап япраҡ ярған бөрөләренә наҙланып яҙ ҙа етте. Быйыл яҙ иртә килде. Тау биттәре ҡарҙан әрселеп, яҙҙың тәүге сәскәһе – умырзая күҙен асты. Ҡоштар ҙа, сыр-сыу килеп, Уралыма ҡайта башланы. Уларҙың тыуған ояларына ҡайтыуы үҙе бер байрамға әйләнә. Ҡоштар шатланышып һайрайҙар. Тыуған төйәктәре өҫтөндә өйөрөлә-өйөрөлә осоп йөрөйҙәр. Ошо күренеш үҙе бер тамаша, яҙҙың онотолмаҫ сағыу бер мәле.

Эш.

1. Беренсе һөйләмдә нәҙек һуҙынҡылар аҫтына бер. Ҡалын һуҙынҡыларға ике һыҙыҡ һыҙ.
2. Күплек ялғауы булған өс һүҙҙе күсереп яҙ.